М. Аҡмулла исемендәге
БАШҠОРТ ДӘҮЛӘТ
ПЕДАГОГИЯ УНИВЕРСИТЕТЫ

Аҡмулла олимпиадаһы
Ҡатнаш. Уҡы. Ең!

**Ҡәҙерле уҡыусылар!**

Башҡорт теле буйынса Аҡмулла олимпиадаһының был турында текст буйынса тест тәҡдим ителә. Һеҙгә мәктәп программаһынан таныш әҫәрҙән алынған тексты иғтибар менән уҡып сығығыҙ, был әҫәр, уның авторы тураһында белгәндәрегеҙҙе иҫкә төшөрөгөҙ. Уның жанр, стиль үҙенсәлектәренә, лексикаһына, автор ҡулланған тасуирлау сараларына, телмәр фигураларына иғтибар итегеҙ. Һүҙлектән таныш булмаған һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен асыҡлағыҙ. Тик шунан һуң ғына тесты эшләргә тотонорға мөмкин.

Һеҙгә уңыштар теләйбеҙ!

**Текст**

(1) Бына бөгөн көтөүҙән ҡайтышлай ҙа Хәбибулланың күңеле тулы борсолоу ине, иңен оло яуаплылыҡ баҫҡайны. (2) Ҡыуарып барған ҡоро йәй. (3) Ямғыр юҡлыҡтан хатта Шайтан һаҙы ла шыңғырап ултыра, һары йылға ҡорор хәлгә етте, малҡайҙарға морон сылатыр һыу юҡ. (4) Бәләкәс кенә быуа ла яһап ҡаранылар, тик унда һыу тиҙ үк йәшелләнеп һаҫыны. (5) Һыйыр малы бит ул селтерәп аҡҡан таҙа һыуҙы ярата – нимә әйтһәң дә, уның еленендә һөт ярала... (6) Колхозда бульдозер бармы? (7) Бар. (8) Торба табылырмы? (9) Табылыр. (10) Булғас һуң, ҙур быуа быуығыҙ, торба һалығыҙ, һыу сәскә атып ултырмаһын, ағып торһон. (11) Күпме генә эше бар. (12) Теләһә ҡайһы күләүектән быҡырлатып эсергә һыйыр сусҡа түгел дә баһа! (13) Һыйыр бит ул, кеше һымаҡ, талымлы, һиммәтле, һиҙгер йән эйәһе. (14) Ел тиҫкәренән иҫтеме, ҡапыл һыуытып ебәрҙеме, йәиһә ҡапыл йылыттымы, һауа баҫымы үҙгәрҙеме, көн йонсоуға киттеме – һәммәһе лә һыйырҙың елененә тәьҫир итә... (15) Әгәр ҙә бер-ике көн эсендә быуа булмаһа – райкомға барам. (16) Нимә, Хәбибулла алама кешеме, ошаҡсымы, ян...ялсымы, ялыу менән йөрөймө?! (17) Бына һиңә! (18) Мин үҙ файҙама сабаммы әллә? (19) Һин, иптәш рәйес, миңә екеренмә! (20) Мин нужаны үлән апараһы менән ҡушып һемергәндә, һин ыштанһыҙ көйө ағас атҡа атланып йөрөй инең әле... (21) Нимә?! (22) Мин насар көтөүсеме?! (23) Ишеттегеҙме, Хәбибулла насар көтөүсе! (24) Ниңә, улай булғас, миңә «Почёт ... » бирҙерттең? (25) Хөрмәт тамғаһы?! (26) Мин уны һинән һорағайныммы? (27) Йә, иртәгәнән ҡалмай, быуа быуҙыраһың, йә орденды кире алаһың – бына шул. (28) Ә хәҙергә иҫән-һау бул!..